ИНТЕРНАТЫМ – ПАР ҠАНАТЫМ

Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты декабрь, 2023 йыл

Төклө аяғың менән, ҡыңғыраулы Яңы йыл!

Быйылғы йыл Рәсәйҙә Уҡытыусы һәм Остаз йылы булараҡ үтте. Был уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәреүҙе маҡсат итеп ҡуйыу ғына түгел, ул башҡарған эштең әһәмиәтен аңлау һәм баһалау ҙа. Шулай уҡ Президентыбыҙ ҡарары уҡытыусының бөйөк роле, педагогтарҙың ҡаҙаҡлеге хаҡында иҫтә тоторға тағы ла бер сәбәп булып тора.

Беҙҙең гимназия бөгөн тотош ил кимәлендә мәғариф системаһында алдынғы уҡыу йорттарының сафында тора. Уны тамамлаусы егет һәм ҡыҙҙар республикабыҙҙа ғына түгел, Рәсәй төбәктәрендә лә уңышлы эшләй. Ошо ҙур уңыштарға өлгәшеүгә беҙҙең педагогик коллектив тос өлөш индерә. Тап беҙҙең гимназияла үҙенең яратҡан эшенә ваҡытын да, сәләмәтлеген дә йәлләмәгән уҡытыусылар, тәрбиәселәр эшләй. Улар – бөгөнгө заман талаптарына яуап бирерлек кимәлгә эйә булған, үҙ белемен, һөнәри оҫталығын даими камиллаштырыусы кешеләр. Сөнки улар киләсәк быуынды тәрбиәләү, сифатлы белем биреүҙә уҡытыусының яуаплылығын дөрөҫ аңлайҙар.

Хөкүмәт тарафынан да уҡытыусыларҙың һәм тәрбиәселәрҙең һөҙөмтәле хеҙмәте баһаланмай ҡалманы. Быйылғы йылда инглиз теле уҡытыусыһы Колпакова Юлия Андреевна Республика Башлығы ҡулынан юғары дәүләт наградаһы – «Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы» исемен алды. Шулай уҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Тимербулатова Римма Мирсәйет ҡыҙы «Рәсәй Федерацияһы мәғарифының почетлы хеҙмәткәре» тигән юғары исемгә лайыҡ булды. Тағы ла бер төркөм педагогтар Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығының Маҡтау ҡағыҙҙарын алды.

Остаз йылы официаль рәүештә тамамланһа ла, беҙҙең көндәлдәрҙә, уҡытыусы тормошонда, мәктәп һәм юғары уҡыу йорттарында ул һәр ваҡыт дауам итәсәк.

Аждаһа йылы яҡынлаша. Коллегаларыма, гимназистарға быйылғы йылды уңышлы, матур һөҙөмтәләргә тамамлап, алдағы йылға ҡыуаныс-шатлыҡ, яңы маҡсаттар, хыялдар менән аяҡ баҫыуын теләйем. Иң мөһиме илебеҙгә тыныслыҡ килһен!

Илнур Рифат улы СӘЛИХОВ,
Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры

* * *

Бар тирә-яҡ һөттәй ап-аҡ,
Ем-ем итеп ҡар көлә:
Көмөш ҡыңғырауҙар тағып,
Беҙгә Яңы йыл килә.
Аҡ урманға ал нур яғып,
Ҡуҙланып яна мышар:
Ҡыҙыл ҡыңғырауҙар тағып,
Беҙгә Яңы йыл килә.
Көртҡә сумып ҡойона шыршы,
Энәһе йәшел генә:
Йәшел ҡыңғырауҙар тағып,
Беҙгә Яңы йыл килә.
Килә Ҡыш бабай, Ҡарһылыу
Ҡашаяй саналарҙа.
Һикерешеп сыға бүләктәр
Тоҡтарҙан, муксаларҙан.
Илһамланып, ең һыҙғанып,
Тейәп теләк-өмөттө,
Ҡыңғырауҙар шалтыратып,
Яңы йыл килеп етте.
Донъя байрам, донъя хайран,
Әйҙә турҙан, Яңы йыл!
Төклө аяҡтарың менән
Хуш киләһең, Яңы йыл!

Хәким Ғиләжев,
яҙыусы

ХЕҘМӘТЕНӘ КҮРӘ – ХӨРМӘТЕ

Уҡытыусы һәм Остаз йылында Хөкүмәт тарафынан уҡытыусыларға иғтибарҙың артыуы үтә лә һөйөндөрә. Уҡытыусылар көнөндә бер төркөм педагогтар Мәғариф һәм фән министрлығының Маҡтау грамоталарын алып ҡыуанды.

В рамках Международного форума по полилингвальному образованию за вклад в воспитание и обучение подрастающего поколения учитель английского языка нашей гимназии **КОЛПАКОВА Юлия Андреевна** удостоена государственной награды – Почетного звания «Заслужённый учитель Республики Башкортостан». Юлия Андреевна – настоящий учитель с большой буквы! Известный историк В. Ключевский говорил: «Чтобы быть хорошим преподавателем, нужно любить то, что преподаешь, и любить тех, кому преподаешь». Эти слова в полной мере можно отнести к Юлие Андреевне.

Желаем Вам крепкого здоровья, благополучия, радости от плодотворного труда, благодарных учеников, интересных проектов и вдохновения от каждого дня!

Римма Мирсәйет ҡыҙы ТИМЕРБУЛАТОВА – гимназияла оҙаҡ йылдар арымай-талмай туған телгә, әҙәбиәткә, мәҙәниәткә ихтирам, һөйөү тәрбиәләгән уҡытыусыларыбыҙҙың береһе. Уның уҡыусылары менән олимпиада, конференция, бәйгеләрҙәге еңеүҙәрен һанап бөтөрлөк түгел. Йөрәгендә рухи матурлыҡ йөрөткән уҡытыусы балаларҙың ижадын үҫтерергә лә, һәләтен асыуға ла ҙур иғтибар бүлә. Үҙенең сәмле, рухлы, дәртле талапсан булыуы менән ул күптәргә өлгө булып тора. «Рәсәй Федерацияһы мәғарифының почетлы хеҙмәткәре» билдәһе – Римма Мирсәйет ҡыҙының хеҙмәт емештәрен лайыҡлы баһалау ул.

Вәсилә Әхәт ҡыҙы ТУЙСИНА, Фәймә Ғибәт ҡыҙы ИШМОРАТОВА – уҡыусылар менән уртаҡ тел табып, уларға дөрөҫ йүнәлеш биреп, һөҙөмтәле эшләгән тәрбиәселәребеҙ. Гимназияла улар тарафынан матур саралар ойоштоҙола, мәктәп сәхнәһендә спектаклдәр ҡуйыла. Изгелекле, талапсан, эшлекле тәрбиәселәр уҡыусыларҙы тормошта үҙ урындарын табырға өйрәтә, ерҙә нык баҫып торған белемле, милли рухлы, тәрбиәле, ил терәге булырҙай ул һәм ҡыҙҙар тәрбиәләй. Шулай уҡ Вәсилә Әхәт ҡыҙы, быйылғы уҡыу йылынан тәрбиә буйынса директор кәңәшсеһе булараҡ, байтаҡ файҙалы эштәр башҡарып өлгөрҙө.

Тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү уҡытыусыһы, тарих фәндәре кандидаты **Сулпан Рәфим ҡыҙы ХӘМИҘУЛЛИНА** 8 йыл (дөйөм эш стажы – 25 йыл) гимназия-интернатта эшләй. Ошо ҡыҫҡа ғына осорҙа ул үҙен төрлө яҡтан һәләтле педагог итеп күрһәтте. Ҡала, республика кимәлендәге олимпиадаларҙа призерҙар, Рәсәй конкурстарында мартәбәле еңеүҙәр шул турала һөйләй. Этнографик музейҙың етәксеһе булараҡ та, уңған педагог ситтән килгән ҡунаҡтарҙың олоһона ла, кесеһенә лә экскурсия алып барыусылар менән берлектә аҡыл мәҙәни-ағартыу эштәрен алып бара. Яңы йыл алдынан Сулпан Рәфим ҡыҙы гимназияға тағы оло еңеү килтерҙе. Ул бер төркөм уҡыусылар менән Мәскәү ҡалаһында үткән Рәсәй Федерацияһы тыуған яҡты өйрәнеү ойошмаларының Бөтә Рәсәй фестивалендә II урын яуланы.

Соципедагог **Шәүрә Шәһит ҡыҙы КЕЙЕКБИРҘИНА** – йәш булыуға ҡарамаҫтан, үҙ эшенә етди ҡараған, балаларҙың күңеленә юл таба алған, талапсан, төрлө кимәлдәге сараларҙы оҫта ойошторған педагогтарҙың береһе. Шәүрә Шәһит ҡыҙы етәкселегендә гимназияның «Рәми» медиаүҙәге, республика, Бөтә Рәсәй бәйгеләрендә ҡатнашып, күп тапҡыр еңеүҙәр яуланы. Искәндәр Мөхәмәтйәнов, Булат Татлыбаев, Әлиә Исхакова кеүек уҡыу алдынғыларына «Артек» лагерында ял итеү бәхете тейҙе. Был, әлбиттә, педагогтың да, уҡыусыларҙың да фиҙакәр хеҙмәт емеше булып тора.

Эйе, мәктәптә эшләгән һәр кемдең хеҙмәте ауыр ҙа, яуаплы ла. Аҡ ҡағыҙҙай бала күңеленә гилем һәм рух орлоҡтарын һибеүсе педагогтарыбыҙҙы мин күңел игенсеһенә тиңләйем. Яңылыҡҡа, белемгә ынтылғанда ғына бала күңелендә осҡон ҡабынды̆рып булғанын яҡшы аңлай тәжрибәле педагогтар. «Хеҙмәтенә күрә – хөрмәте», – тиҙәр халыҡта. Намыҫлы эштәре өсөн Маҡтау ҡағыҙына, юғары исемдәргә лайыҡ булған остаздарыбыҙ ҙур тырышлыҡ менән изге бурыстарын артабан да дауам итһен.

Г. С. Ҡылысова,
башҡорт теле уҡытыусыһы

ӘСӘҺЕН ҠӘҘЕРЛӘГӘН ҠӘҘЕРЛЕ БУЛЫР

Ноябрь айының һуңғы ялында илебеҙҙә Әсәйҙәр көнө билдәләнә. Ул көн гимназистарҙың да көтөп алған байрамы. Шулай булмай ни? Өй йылыһынан айырылып, баш калаға уҡырға сығып киткән балаларҙы, әлбиттә, әсәй назы, әсәй мөхәббәте, әсәй ҡосағы һағындыра. Шуғалыр ҙа был көндә яҡын кешеңде ҡотлау, уға иң изге, йылы һүҙҙәреңде еткереү – үҙе оло бәхет. Беҙҙең 11 г класы ла байрам көндә әсәләрен, өләсәләрен дәррәү ҡотлап алды. Тиҫтерҙәремдең ҡайһы бер фекерҙәрен һеҙгә лә еткерәйем әле.

Бикмаева Сөмбел: әсәй кеше өсөн һин ун биш йәштә лә, илле йәштә лә бала булып ҡалаһың. Уның ҡанаты аҫтында үҙеңде хәүефһеҙ тояһың. Әсәй ҡосағы ожмахҡа тиң, тип юҡҡа әйтмәгәндәрҙер.

Усманова Нургөл: әсәй кеше һине нисек барһың, шулай ҡабул иткән берҙән-бер кеше. Әсәй – ул ышаныс, наҙлылыҡ, иҙгелек, ҡыуаныс, хәүефһеҙлек. Әсәй мөхәббәте хыянат белмәй, сөнки ул үҙ балаһына йәне һәм йөрәге менән тоғро булған кеше. Әсәйҙәрҙе һаҡлайыҡ! Уларҙың мөхәббәте дуҫтар һәм әхирәттәр мөхәббәтенә ҡарағанда күпкә ҡәйнар!

Әбдрәхимова Миләүшә: тормош тигән оло юлға баланы баҫтырған, дөрөҫлеккә өйрәткән кеше. Әсәйҙәргә мең рәхмәт, сөнки улар ҡулында – донъяның киләсәге.

Мөхәмәтова Гөлсинә: тыуған як, өй тураһында уйлағанда, иң беренсе әсәйҙе күҙ алдына килтерәбеҙ. Ул өйҙә булғанда, өй ҙә йәмле, тирә-як та матур. Йылы һүҙҙәрҙе әйтеү өсөн байрам көтөп йөрөргә кәрәкмәй, көн дә әйтергә мөмкин.

Хәйруллина Диля: моя мама – лучик солнца при плохой погоде. Она всегда открытая, добрая, веселая. Если заболела мама, то весь дом будет ходить грустной. Ведь именно она держит уют, тепло и «огонь» в доме.

Йәрмиева Лилия: мама – это тот человек, который простит и поддержит во всех начинаниях. Она не будет требовать ничего взамен, ведь для матери важно, чтобы ее ребенок был счастлив.

Мирхәйҙәров Денис: әсәй яҡын булһа, бүтән бер нәмә лә кәрәкмәй. Әсәйем минең өсөн дуҫ һымаҡ, сөнки уға бөтә проблемаларҙы һөйләргә була.

Ҡыҙрасова Айлина: быть мамой – это тяжелый, безвозмездный труд. Каждая мама отказывается от чего-то в пользу воспитания детей. Поэтому самое малое, что мы можем, так это быть благодарными.

Хәлилова Альбина: мама – это любовь, забота, самоотверженность, готовность пойти на все ради своего ребенка. Даже если ты стал взрослым, для матери всегда будешь ее маленьким сыном или дочерью.

Сәғәртдинова Гүзәл: әсәйем миңә һәр ваҡыт терәк һәм таяныс. Уңыштарыма ихлас ҡыуана, уңышһыҙлыҡҡа осраһам, кәрәкле һүҙҙәр табып йыуата. Миңә бер нәмә лә ҡурҡыныс түгел, сөнки янымда ышаныслы кешем – әсәйем бар.

Дарменова Гөлсимә: тик әсәйҙәр арҡаһында беҙ бәхетле, көләс, шаян, улар ярҙамында белем алабыҙ. Ҡәҙерле әсәйҙәр, һәр ваҡыт сәскәләр кеүек матур, нәфис булығыҙ. Беҙ һеҙҙең йөҙөгөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәбеҙ, һеҙҙең өмөттәрҙе аҡларбыҙ. Беҙҙең бәхетле бала саҡ өсөн ҙур рәхмәт!

Гөлсинә Мөхәмәтова, *11 г класы уҡыусыһы*

ӨР-ЯҢЫ КИТАП ДОНЪЯ КҮРҘЕ

10 ноябрҙә гимназияла Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры, прозаик, публицист һәм ғалим-энциклопедист, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Рәшит Шәкүрҙең «Ынйы бөртөктәре» шиғри китабының исем туйы үтте. Сара Р. Шәкүр һәм Р. Бикбаев һүҙҙәренә яҙылған Башҡортостандың Дәүләт гимнын башҡарыуҙан башланды.

10 д класы уҡыусылары Хәсәнова Нурзилә һәм Байрамғәлина Гөлнур сараны бик йәнле алып барҙы. Ғалимдың тормош юлына, ижадына байҡау яһағандан һуң, ҡунаҡтар һәм уҡыусылар видеоролик ҡаранылар (ауырыу сәбәпле, автор үҙе килә алманы). Рәшит Закир улы видеомөрәжәғәт аша гимназистарға дөрөҫ һөнәр һайлауҙың әһәмиәтен, рухлы, сәмле, сәләмәт тормош булыу кәрәклеген һәм туған телде һаҡлау бурысын еткерҙе. Хәсәнова Резеда, Ғайсина Рената, Буранғолова Гүзәл әҙиптең яңы китабына тупланған бер нисә шиғырын яттан һөйләп ишеттерҙе.

Сара барышында уҡыусылар БР Милли әҙәбиәт музейы директоры, яҙыусы Миләүшә Ҡаһарманова, Өфө күп профилле профессиональ колледж директоры Сынтимер Биктимер улы Баязитов, Рәшит Шәкүрҙең ҡыҙы, сценарист, драматург, прозаик Шәүрә Шәкүрованың сығыштарын тыңланы. Гимназия китапханаһында БР Милли әҙәбиәт музейы фондынан шағирҙың күргәҙмәһе ҡуйылды. Экспонаттар уҡыусыларҙа ла, уҡытыусыларҙа ла ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Бигерәк тә Аҡмулланың үҙ ҡулдары менән ҡаҙауһыҙ-ниһеҙ эшләгән китап ҡуйыу өсөн ҡулланмаһы, Р. Шәкүрҙең совет замандағы яҙыу машинкаһы уҡыусыларҙың иғтибарын йәлеп итте. Милли әҙәбиәт музейы тураһындағы һорауҙарға әүҙем яуап биргән балалар М. Ҡаһармановаҙың автографлы китабы менән бүләкләнде. Сара шағирҙың киң танылыу алған «Башҡорт телендә һөйләшәм» йыры менән тамамланды.

Йәнле осрашыуҙы ойоштороусы китапхана хеҙмәткәрҙәре Альбина Миҙхәт ҡыҙы, Әнүзә Фәрит ҡыҙына 10 д, 11 д, 8 в кластары исеменән ҙур рәхмәт белдерәбеҙ.

Әнүзә Фәрит ҡыҙы, *китапханасы*

АРТЕК – УЛ ХЫЯЛДАР ТОРМОШҠА АША ТОРҒАН УРЫН!

Ҡырымда урынлашҡан Халыҡ-ара балалар үҙәге «Артек»та ял итеү бәхете, ниһайәт, миңә лә тәтене. Рәсәй конкурсында сираттағы еңеүҙән һуң, етәксем Шәүрә Шаһит ҡыҙы Кейекбирҙина менән бергә был мауыҡтырғыс сәйәхәткә, бала саҡ илене – Халыҡ-ара балалар үҙәге «Артек»ка, икәүләп юл тоттоҡ. Мин эләккән 11-се смена «Артек» – минең изге уҡытыусым» исеме аҫтында үтте. Был юҡҡа түгел, сөнки ялыбыҙ нәҡ Уҡытыусылар көнөнә тура килде.

«Артек»ка барыу өсөн ниндәй еңеүҙәр кәрәк тип уйлаһығыҙ. Эйе, дөрөҫ. Бөтә Рәсәй уҡыусыларының үҙидара советы «Уңыш векторы» конкурсында еңеүсе булып танылып, төп бүләк – Ҡырымға сәйәхәт тигәндә ишеткәс, үҙ-үҙемә ышанмай торҙом. «Уңыш Векторы» сиктәрендә шулай уҡ уҡыусыларҙың үҙидара форумы ла үтте. Бында һәр кем үҙенең идеялары менән уртаҡлашып, яңы белем туплап, һуңынан үҙҙәренең мәктәптәрендә уҡыусылар советы асырға һәм был йүнәлештә үҫтерергә мөмкинселек ала.

«Артек» – ул һәр бала үҙ урынын табып, һәләттәрен асыу өсөн булдырылған үҙәк. Бында баланың күңеле теләгән бөтә нәмә бар: иҫ киткес йыһазландырылған спорт майҙансыҡтары, ял итеү, аралашыу өсөн уңайлы урындар. Балалар яратҡан урындарҙың береһе – ашхана, унда һәр ваҡыт тәмле һәм сәләмәт ризыҡтан ләззәт алырға мөмкин. Беҙ менюҙың төрлөлөгөнә һәм аҙыҡ-түлектең сифатына хайран ҡалдыҡ, тип әйтһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ.

Смена ваҡытында үҙебеҙҙең отряд менән Севастополь ҡалаһына һәм Ҡырымдың Көньяҡ ярына сәйәхәт тә ҡылдыҡ. Ул онотолмаҫлыҡ тәьҫораттар ҡалдырҙы, сөнки унда беҙҙе Ҡырымдың тарихы, мәҙәниәте менән таныштырҙылар, шулай уҡ илебеҙҙең героик үткәне тураһында файҙалы мәғлүмәт бирҙеләр.

Мин дә, форсаттан файҙаланып, «Артек»тың тарихына туҡталып үтәйем. Уға 1925 йылда, пионер лагеры булараҡ, нигеҙ һалына. 1930 йылдарҙа «Артек» та Граждандар һуғышынан яфаланған Испания балалары ял итә. Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында «Артек» Алтайға эвакуациялана. Һуғыштан һуң, кире әйләнеп ҡайтҡас, лагерҙа яңы корпустар әүҙем төҙөлә башлай. 1969 йылда бер сменала 3200 бала ял иткән. Бөгөн «Артек»та ун база эшләй: «Диңгеҙ», «Гәрәбә», «Гәлсәр», «Зәңгәрһыу», «Урман», «Күл», «Ялан», «Йылға», «Кипарис». Уларҙың һәр береһендә балаларҙың уңайлы йәшәүе, туҡланыуы һәм ял итеүе өсөн барлыҡ шарттар булдырылған. Мин «Гәрәбә»лә ял иттем. Әйткәндәй, бала лагерҙы үҙе һайламай, лагерь баланы һайлай. «Гәрәбә» 1963 йылда төҙөлгән һәм иң борондоларҙан һанала. Был лагерь Ҡара диңгеҙ ярында, Аю-даг тауы янында урынлашҡан.

Лагерь үҙ ҡанундары, йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре булған Ялта ҡалаһында урынлашҡан бәләкәй илде хәтерләтә. «Артек»та төп йолаларҙың береһе булып яңы артековсыларҙың осрашыуы тора. Көн һайын лагерға яңы балалар килә. Уларҙы Ҡырымдың был тылсымлы мөйөшөн яратырға өлгөргән өлкән артековсылар ҡаршы ала, лагерь ҡағиҙәләре һәм йолалары тураһында һөйләй, үҙҙәрен өйҙәге кеүек тойорға ярҙам итә. Уйындар, отряд менән әҙерләгән тамашалар шулай уҡ матур йола булып һанала. Был спорт ярыштары ғына түгел, ә отрядтар ҡатнашҡан ысын театрлаштырылған тамаша. Уйындар балаларға үҙ һәләттәрен асырға, командала эшләргә һәм дөйөм маҡсаттарға өлгәшергә ярҙам итә. Шулай уҡ «Киске усаҡ» йолаһы бар. Эйе, «Артек»та традицион байрамдарһыҙ бер смена ла үтмәй.

Октябрь айында «Артек»та ике гимназист – Яҡупова Сәлимә һәм Фәткелбаянов Эрик барып ҡайтты. «Артек»та үҙғарылған Бөтә Рәсәй конкурсында улар призерҙар булды һәм 200 мең һум күләмендәге премияға лайыҡ булдылар. Ә ноябрҙә тағы өс гимназист – Татлыбаев Булат, Исхакова Әлиә һәм Григорьева Анастасия «Артек»та булдылар!

«Артек» минең тормошомда ғүмергә онотолмаҫлыҡ эҙ ҡалдырҙы. Тоғро дуҫтар таптым, аралашыуҙан ыңғай эмоциялар алдым. Хыялымды тормошҡа ашырырға ярҙам иткәне өсөн, остаҙым Шәүрә Шаһит ҡыҙына бик рәхмәтлемен. Әгәр ҙә уҡыусылар был тылсымлы бала саҡ иленә барып ял итеп ҡайта алһа, ҙур бәхет тип иҫәпләйем. «Артек» һәр балаға яҡшыраҡ һәм бәхетлерәк булырға мөмкинлек бирә.

Искәндәр Мөхәмәтйәнов, *8 г класы уҡыусыһы*

ЙЫЛ ВАҠИҒАҺЫ

21–22 ноябрҙә Өфө ҡалаһында мәктәп-интернаттың 1988 йылғы арҙаҡлы сығарылыш уҡыусыһы, археолог, академик, тарихсы-ғалим, билдәле йәмәғәт эшмәкәре Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитовтың тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған тантаналы саралар булып үтте. Тәүгеһе – «Мәжитов уҡыуҙары» халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияһы, икенсеһе ғалим уҡыған мәктәптә Нияз Мәжитов исемендәге тарих кабинет-музейын асыу булды. Сараға конференцияла ҡатнашыусылар, мәртәбәле ситил ғалимдары, Ғафури районының яҡташтар берләшмәһе вәкилдәре, кабинетты ойоштороуҙа ҡатнашҡан белгестәр, профессорҙың ҡыҙы Әлфиә Нияз ҡыҙы Солтанова килде. «Яңы асылған кабинет республикабыҙҙың археологик потенциалын өйрәнеүҙә ҙур ярҙамсы булып торасаҡ. Уны йыһазландырыуҙа һәм асыуҙа ярҙам күрһәткәне өсөн Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының 7-се саҡырылыш депутаты, гимназист Данир Әхмәҙи улы Ғәйнуллинға педагогик коллектив исеменән ҙур рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ», – тине гимназия директоры Илнур Рифат улы Сәлихов. Беҙ, уҡыусылар, күренекле сығарылыш уҡыусыһы менән ғорурланабыҙ һәм, үҙ сиратыбыҙҙа, мәшһүр шәхестең тормош юлын, эшмәкәрлеген өйрәнергә, уның етәкселегендәге археологик экспедицияларҙың уңыштарын белергә бурыслыбыҙ.

Мәҡәләмдең һуңында Нияз Абдулхаҡ улына арналған, ғалим менән бергә экспедицияларға сыҡҡан яҡын дуҫы, шағир Рәми Ғариповтың «Ҡала-тауҙар» шиғырының һуңғы юлдарын иҫкә төшөрәм:

Археолог дуҫым – ҡаберлектә,
Быға йәнә ергә инкәйҙе:
Ҡатын-ҡыҙҙың ынйыларын эҙләп,
Эҙләйҙер ул тыуған илкәйҙе.

Шәйхетдинова Айгизә, *11 б класы уҡыусыһы*

ТЕРПЕНИЕ И ТРУД ВСЕ ПЕРЕТРУТ

В авиаинженерном кружке под руководством Рамиля Рашитовича Кабирова, который работает уже 5 лет, мы проектируюем, создаем макеты и прототипы летательных аппаратов самолётного, мультироторного типа, а также ракеты. Конечно же, все эти изделия испытываются на полигоне за городом. Именно эти испытания оставляют неизгладимые впечатления у нас. Так мы учимся всем тонкостям изготовления летательных аппаратов путём проб и ошибок, взлётов и падений своих моделей. Ежегодно участники этого кружка становятся призёрами и победителями республиканских и Всероссийских соревнований по беспилотникам. Только за прошедший год, помимо многочисленных выставок, кружковцы приняли участие в таких конкурсах, как «Вернадские чтения», «Большие вызовы», «Воздушно-инженерная школа», хакатон «Линия кармана». Мы участвовали во Всероссийском чемпионате конкурса «Воздушная инженерная школа», где наши участники не только на республиканском, но и на Всероссийском этапе показали наивысшие результаты. Также гимназисты стали победителями в лиге мультироторных беспилотников, то есть коптеров. А вот в лиге ракетостроения кружковцы стабильно идут на II месте по России. «Совместный упорный труд, качественная база, желание победить обязательно принесут нам первенство по стране. А нашими соперниками являются студенты технических вузов Санкт-Петербурга, Москвы и других регионов. А это очень серьёзные соперники!» – говорит наш руководитель Рамиль Рашитович. Мы верим в нашу победу и желаем команде удачи и везения. Терпение и труд все перетрут!

***Руслан Хажин**, ученик 11а класса, кружковец*

КИНЙӘ АРЫҪЛАНОВТЫҢ ТЫУЫУЫНА – 300 ЙЫЛ!

Быйылғы йылда башкорт старшинаһы, бошман-кыпсак ырыуының арҙаклы шәхесе, 1773—1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышы етәкселәренең береһе, Е.И. Пугачёвтың баш полковнигы Кинйә Арыҫлановтың тыуыуына 300 йыл тула. 16 ноябрҙә ошо мөһим датаға бәйлә 8 б һәм 8 в кластары араһында викторина үтте. Уны гимназия-интернатта практика үтеүсе ӨФһТУ-ның IV курс студенттары ойоштторҙо. Әҙерлек төйешле кимәлдә барҙы, сөнки тап 8-се класта беҙ Ғәли Ибраһимовтың «Кинйә» романынан өҙөктәр уҡыныҡ, уның биографияһы менән таныштыҡ, интернет селтәрҙәренән, китапхананан, википедиянан мәғлүмәттәр эҙләнек. Ике командаға бүленеп ярыштыҡ: «Таңыяк амурҙары» (8 б класы) һәм «Беренселәр» (8 в класы). Бирелгән һорауҙар тест формаһында тәҙелгән ине. Дүрт яуаптың дөрөҫөн табыуы әллә ни ауырлыҡ тыуҙырманы. Шулай ҙа бәхәсле мәлдәр булды. Күмәкләп хәл иткәндән һуң, еңеүсе тип «Таңыяк амурҙары» командаһы билдәләнде. Иң мөһиме: был уйында беҙ байтак яңы мәғлүмәт белдек. Мәҫәлән, боронғо Кинйәабыҙ ауылынан бер юлы ес Советтар Союзы Геройының сығыуы менән беҙ ҙур яңылыҡ булды. Бына улар – Ғәфиәтулла Арыҫланов, Сәлмән Бикмимеров, Хәсән Ғәйсин. Тарихсы Ә. Әсфәндиәров мәғлүмәттәре буйынса, был атаҡлы ауылға тап Кинйә Арыҫланов нигеҙ һалған.

Викторина тамамланғас, ҡатнашыусыларҙың барыһы ла иҫтәлекле бүләктәр алды. Практика үтеүсе апайҙарға уҡыуҙарында уңыштар теләйбеҙ һәм бәйге өсөн рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

***Камила Биктимерова**,*
8 в класы уҡыусыһы

ИЗГЕ ЭШ – ЯРТЫ ДӘҮЛӘТ

Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башкорт республика гимназия-интернаты коллективы үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап йәшәмәй, республика, Рәсәй кимәлендә ойошторолған сараларҙа ла әүҙем ҡатнаша. Шулар араһында дан өсөн түгел, сауап өсөн башҡарылған эштәр ҙа бар. Ноябрь айында махсус хәрби операция барған ергә ылау йыйып ебәрергә тигән тәкдимде коллектив күтәреп алды. Был изге ғәмәлде башкарыуҙа уҡыусылар, сығарылыш уҡыусылары, ата-әсәләр ҙә ихлас ҡатнашты, һәм ике көн эсендә 20 ҡап гуманитар ярҙам йыйып та ҡуйылды. Уҡыусылар һалдаттарыбыҙға эсталекле, йылы хаттар яҙҙы, ата-әсәләр тыуған яҡтың киптерелгән үләндәренән сәйҙәр әҙерләне, йылы ойоҡбаштар, бейәләйҙәр бәйләп ебәрҙе. Иң мөһиме: ошо ылауҙың үҙебеҙҙең башкорт егеттәренең хеҙмәт иткән еренә барып эләгеүе ине. Был бурысты беҙҙә гимназия-интернаттың сығарылыш уҡыусыһы Азат Шамил улы Бадранов тормошҡа ашырырға ярҙам итте. Беҙҙең гуманитар ярҙамды алып, үҙенең кисерештәрен видео аша еткереп, рәхмәтен белдерҙе. Халҡыбыҙҙа «Изге эш – ярты дәүләт» тигән әйтем бар, ысынлап та, тыуған илебеҙ, халҡыбыҙ өсөн уның яҡты киләсәгенә башкарылған эштәр, изге ғәмәл – үҙе бер хазина. Ошо рухи байлығыбыҙҙан айырылмайыҡ!

***Васила Туйсина**,*
тәрбиә эштәре буйынса директор ҡанашсеһе

ТАРИХ АҘНАЛЫҒЫ ЙОМҒАҠТАРЫ

20–30 ноябрҙә гимназияла тарих һәм география фәндәренең предмет аҙналығы үтте. Декада сиктәрендә асыҡ дәрестәр күрһәтелде, кластан тыш саралар һәм төрлө осрашыуҙар ойошторолдо. Аҙналыҡ ҙур тарихи ваҡиға менән башланып китте: 22 ноябрҙә мәктәп-интернаттың арҙаҡлы сығарылыш уҡыусыһы, күренекле археолог Нияз Мажитов исемендәге кабинет – музей асылды.

Аҙналыҡты артабан Азамат Салих улы Шарафетдинов дауам итте: 7 а класында финанс белем буйынса «Рәсәй Федерацияһының һалым системаһы» темаһына уҡыусылар өсөн мәғлүмәти яҡтан бик тә ҡарақле дәрес үткәрҙе.

Резида Салих ҡыҙы Шарафетдинова асыҡ дәрес барышында 10 б класы уҡыусылары менән Закондар сығарыу процесын өйрәнһә, Сулпан Рафим ҡыҙы Хәмиҙуллина 8 б класы менән милли геройыбыҙ Салауат Юлаев үткән юлдар буйлап сәйәхәт ҡылды. Таңһылыу Рим ҡыҙы Йомағужина, 7 д класын океан киңлектәренә алып сығып, экологик проблемаларҙы барланы. Дөйөм алғанда, уҡытыусылар коллегалары менән яңы ФГОС талаптарына яуап бирерлек фәһемле, йөкмәткеле дәрестәре менән тәжрибә уртаҡлашты.

Кластан тыш сараларға килгәндә, тарих фәндәре кандидаты С.Р. Хәмиҙуллина 8-се кластарға ойошторған «Нимә? Ҡайҙа? Ҡасан?» интеллектуаль уйынында уҡыусылар Рәсәйҙең XVIII быуат тарихын яҡшы белеүҙәрен күрһәтте. А.С. Шарафетдинов 10 а, 10 е класс уҡыусылары менән финанс белем буйынса «Аҡса ағымы» (денежный поток) уйынын ойошторҙо, эксперт булып 2000 йылғы сығарылыш уҡыусыһы, Уралбизнеснефть ойошмаһының һатыу бүлеге етәксеһе Басыров Илшат Риваль улы ҡатнашты.

Т.Р. Йомағужина 8-се кластар менән «Географик посткроссинг» проектына ҡушылды, Якутия, Мордовия уҡыусыларына Башкортостан тарихы буйынса һорауҙар яҙылған открыткалар ебәрҙе. Р.С. Шарафетдинова 11 б һәм 11 д класы уҡыусылары менән Берҙәм Рәсәй партияһы штабында уҙғарылған РФ Конституцияһына арналған сарала ҡатнашты. Т.Р. Йомағужина, З.С. Миниярова «Карталар буйынса чемпионат» үткәрҙе. 13 декабрь көнө үткәрелгән экологик акцияла гимназия уҡыусылары макулатура йыйҙы. Ә.Ә. Баймөхәмәтова 7 б класы менән 112-се Башкорт кавалерия дивизияһының музейына экскурсияға барҙы.

Шулай уҡ аҙналыҡ сиктәрендә күп һанлы премиялар лауреаты, Ер шарының байтаҡ ерҙәрендә сәйәхәт иткән, уникаль китаптар авторы, ихлас һәм ҡыҙыҡлы әңгәмәсе, күп яҡлы талант эйәһе Камил Йыһаншин менән йәнле, күңелдәрҙә оҙаҡ һаҡланыр осрашыу ойошторолдо.

Аҙналыҡ һәр йылдағыса уҡыусылар һәм коллегалар өсөн емешле, файҙалы булды, ә юғары кимәлдәге дәрестәр, саралар барыбыҙға ла ысын мәғәнәһендә тәжрибә туплау, уртаҡлашыу майҙанына әүерелде. Барлыҡ коллегаларға артабанғы эштәрендә ижади уңыштар теләйем!

***Ә. Ә. Баймөхәмәтова**,*
тарих фәндәре методберекмәһе етәксеһе

НАШИ ПОКОРЯЮТ МОСКВУ

Международная выставка-форум «Россия» – это важнейшие достижения страны, собранные в одном месте. На этом Международном выставочном форуме будут представлены субъекты Российской Федерации, крупнейшие корпорации и общественные организации, а также зарубежные страны. В рамках выставки посетителей ожидает демонстрация различных достижений нашей страны, культурно-развлекательная программа, дни регионов, деловые недели, фестивали кулинарных традиций и ярмарка. Она продлится до 12 апреля, в течение всего времени проведения выставки гостей ждут культурно-развлекательные мероприятия, насыщенная деловая и образовательная программа.

8 и 9 декабря 2023 года были объявлены Днем Патриота. К стенду Республики Башкортостан съехались кадеты и шаймуратовцы Республиканской полилингвальной многопрофильной гимназии № 1 и № 2, Башкирской республиканской гимназии-интерната № 1 имени Рами Гарипова, Уфимской общеобразовательной школы-интерната с первоначальной летной подготовки имени Дважды Героя Советского Союза М.Г. Гареева, чтобы заступить в почётный караул у макета памятника Герою России М.М. Шаймуратова. В рамках форума прошли различные мастер-классы: «Нарисуй победу», «Сумка Патриота», военно-историческая викторина, «Угадай мелодию» – «Песни военных лет. Наша гимназия подготовила много мастер-классов, игр, на одной из них гимназисты поделились историей изготовления национальной одежды, а посетителям помогли самим сшить мини-нагрудники. Для маленьких гостей была предложена роспись на магнитных сувенирах с изображением башкирской юрты. Настольная «Игра в башкира» рассказывает о быте, украшениях, традициях башкирского народа. Гости с большим интересом и удовольствием принимали участие в этой игре. Немалый интерес вызвал стенд, посвященный истории проживания башкирских родов (ырыу). Участники этого форума, наши гимназисты, были в восторге от праздника и его великолепия. «Я очень рад, что я оказался в числе тех, кто представлял нашу республику, и буду ее представлять достойно», – гордо сказал обучающийся шаймуратовского класса ГБОУ БРГИ № 1 Тагиров Анир. «Сколько стихотворений, песен сложено о Москве, но все равно нельзя передать словами все волшебство этого города», – так выразил свой восторг наш шаймуратовец Мухамедьянов Искандер.

Чтобы понять то чувство гордости, которое переполняет меня и наших обучающихся, нужно побывать на международном форуме Россия, проходящем в настоящее время на ВДНХ в Москве. Здесь можно увидеть представителей всех и вновь вошедших в состав России регионов. Я тоже безмерно счастлива, что именно мне была предоставлена честь рассказать всей России о своей Республике, о традициях, культуре народов, населяющих ее. Спасибо большое за доверие и поддержку администрации БРГИ № 1 имени Рами Гарипова.

***Регина Рамилевна Бакулина**,*
педагог дополнительного образования

ТӘҮГЕ ҺӨЙӨҮ

Һөйөү – ялҡын, тиҙәр,
Ышандым шул һүҙгә.
Ҡыҙыҡтым мин һиңә,
Түҙеп булмай бер ҙә.
Ялҡын ялмап алды,
Бөтә күңелемде.
Уйлап ҡына йөрөйөм
Ҡасан күреремде.
Йәшел күҙҙәр – йәшел урман,
Аҙаштырҙы мине.
Һөйөү хистәренә сорналы
Минең күңелемде.

***Азалия Солтанова**,*
9 в класы уҡыусыһы

ЮБИЛЕЙҘАР ҠОТЛО БУЛҺЫН!

Эльвира Әхтәм ҡыҙы Йонова – 45 йәш
Гөлназ Морат ҡыҙы Ғәлекәйева – 45 йәш
Лилиә Искәндәр ҡыҙы Әминева – 50 йәш
Альбина Хәсән ҡыҙы Ҡайбышева – 50 йәш
Зилиә Ғәлиәхмәт ҡыҙы Жужина – 50 йәш
Әлиә Рәис ҡыҙы Йәндурина – 50 йәш
Әминә Әнүәр ҡыҙы Баймөхәмәтова – 50 йәш
Зифа Зыя ҡыҙы Искәндәрова – 50 йәш
Айгөл Йәүҙәт ҡыҙы Мырҙашева – 50 йәш
Фәүзиә Мәнъюл ҡыҙы Шафиҡова – 55 йәш
Айсилә Сәлим ҡыҙы Нуриәхмәтова – 55 йәш
Әлиә Шәрифулла ҡыҙы Мәхмутова – 55 йәш
Ирина Владимировна Борина – 60 йәш
Гөлдәр Вәис ҡыҙы Әхмәтова – 65 йәш
Ирина Хисам ҡыҙы Татлыбаева – 65 йәш

Педагог һәм остаз йылында гимназияла күркәм юбилейҙар ҙа үтеп тора. Абруйлы коллегаларыбыҙҙы матур юбилейҙары менән ҡотлайбыҙ, һәр берегеҙҙе шәхес булараҡ зурлайбыҙ, хөрмәт итәбеҙ. Һеҙгә ҙур уңыштар, һаулыҡ теләйбеҙ. Ауыр ҙа, яуаплы ла эшегеҙ һеҙҙең, Рәми Ғарипов әйтмешләй, «матурлаһын, биҙәһен һәм үҫтерһен». Үҫеп килгән быуын иңдәренә осар ҡанаттар ҡуйып, уҡыусыларыбыҙҙы милләтебеҙҙең йөҙөн билдәләрлек шәхес итеп тәрбиәләгән өсөн һеҙгә ҙур рәхмәт. Артабан да илһам, дәрт, ижади уңыштар теләйбеҙ.

Профсоюз комитеты

ЭЙ ҺӨЙӨКЛӨ, ЭЙ ҠӘҘЕРЛЕ БАШҠОРТ ТЕЛЕ!

Кешелек аҡылы донъяға килтергән ҙур асыштар араһындағы иң даһи асыш, бер мөғжизә ул тел. Тел халыҡтың үҙе менән бергә яралып, үҙе менән бергә үҫә. Шуның өсөн ул халыҡтың бөтә яҙмышын, бөтә булмышын сағылдыра. Әсә телендә иң беренсе бишек йыры ишетәбеҙ, өн-аваздар әйтәбеҙ, тәүге һүҙҙе һупалайбыҙ, әсә телендә уйлайбыҙ, ҡайғырабыҙ, шатланабыҙ беҙ.

Бөйөк мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулланың тыуған көнөндә, йәғни 14 декабрҙә, Башҡорт теле көнө билдәләнә. Республиканың бөтә уҡыу йорттарында төрлө саралар ойошторола был көндә. Беҙҙең гимназия ла бер ҡасан да ситтә ҡалмай.

Иғтибар, гимназистар! «Интернатым-пар ҡанатым» гәзите башҡорт теле көнө уңайынан бәйге ойоштора. Түбәндәге 10 һорауға дөрөҫ яуап биргән тәүге 3 уҡыусы приз отасаҡ. Әйҙәгеҙ, кем зирәгерәк, отҡорораҡ, етеҙерәк!

1. Башҡорт теле ҡайһы телдәр ғаиләһенә ҡарай?

2. Ж. Кейекбаев, Ғ. Сәйетбатталов, Ф. Хисаметдинова, М. Усманова, М. Зайнуллин, В. Псянчин кеүек арҙаҡлы шәхестәрҙе беләһегеҙме? Кемдәр улар?

3. *Бирҙең, таңрем, телде бергә,*
һөйлә, тип,
Тура юлға телде шуға айҙайым!
Был юлдарҙың авторы кем?

4. Беренсе башҡорт милли алфавитын төҙөүсе һәм башҡорттарҙан беренсе булып «Әлифба» яҙыусы ғалим, дәүләт эшмәкәре кем ул?

5. Черновик, холодильник, возможность, рукопись, самосознание һүҙҙәрен башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

6. *Башҡорт телендә һөйләшәм,*
башҡорт телендә.
Минең йәшәү тамырҙарым –
башҡорт ерендә.
Был юлдарҙың авторы кем?

7. *Баллап-арлап тел менән*
Кеше иткән инәбеҙ,
Эшле иткән инәбеҙ;
Һөйләп, көйләп, тел менән
Хисле иткән инәбеҙ,
Ҡеҫле иткән инәбеҙ;
Үҙебеҙҙе тел менән
Йырлы иткән инәбеҙ!

Был юлдар кемдеке һәм улар ҡайһы әҫәрҙән алынған?

8. Түбәндәге фразеологик берәмектәргә аңлатма бирегеҙ.
Типһә тимер өҙәрлек, утҡа баҫҡан бесәй һымаҡ, айыу майы һөртеү.

9. «Янғантау, Небит-даг, Дагстан, Кокчетав» һүҙҙәрендә ниндәй уртаҡ һүҙ бар?

10. Мәҡәлдәрҙе дауам ит:
а. Тыуған телен ҡәҙерләгән халыҡ ...
б. Татлы тел йыланды ла ...
в. Аҡылы ҡыҫҡаның ...
г. Оҫта барҙа ҡулың тый, ...

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары методберекмәһе

АЖДАҺА ЙЫЛЫ МЕНӘН, ДУҪТАР!

Иң сағыу, иң матур, уҡыусылар түҙемһеҙләнеп көтөп алған байрамдарҙың береһе – Яңы йыл яҡынлаша. Һәр кем ул байрамды мөғжизәле бер мәл итеп күҙ алдына килтерә, әҙерләнә. Гимназияның 8 в класы уҡыусылары өсөн Яңы йыл ниндәй байрам икән, әйҙәгеҙ, үҙҙәренән һорайыҡ.

Яңы йылдың матурлығын күреп, әкиәт донъяһына сумған һымаҡ хис итәм үҙемде. Хатта ул көндә һулаған һауанан да байрам тәме килгән кеүек. Беҙҙең дә үҙ йолабыҙ бар: бөтә күңелһеҙ ваҡиғаларҙы, проблемаларҙы иҫке йылда ҡалдырып, Яңы йылға яңы, таҙа уйҙар менән аяҡ баҫыу, үҙеңде бәхетле итеп тойоу.

Әлиә Сафина

Яңы йыл – минең өсөн тылсымлы мәл. Өйөбөҙҙәге сағыу биҙәүестәр, ялтырауыҡлы әйберҙәр – барыһы ла әкиәт һәм тылсым тойғоһон уята. Был байрамда иң мөһиме – кешеләрҙең бер-береһенә яҡынайыуы. Тап Яңы йылда туғандарыбыҙ һәм яҡындарыбыҙ менән түңәрәк өҫтәл артына йыйылып, аралашабыҙ, ҡотлайбыҙ, бүләктәр бирешәбеҙ.

Бала сағымда Яңы йылды айырыуса түҙемһеҙләнеп көткәнемде хәтерләйем, сөнки бүләктәр, тәмлекәстәр күп буласаҡ. Ҙурая төшкәс, аңланым: байрамдың тылсымы бүләктәрҙә генә түгел икән... Үткән йылға йомғаҡ яһау, алға маҡсаттар ҡуйыу, ғаилә менән ваҡыт үткәреү мөмкинлеге лә ул!

Яңы йыл, шулай уҡ, көндәлек ығы-зығыны онотоп, мөғжизә һәм тылсым донъяһына сумыу ҙа ул. Байрам бөтәбеҙгә лә шатлыҡ бүләк итә, бәхет өләшә, күңелдәрҙе йылылыҡ менән тултыра. Шуғалыр ҙа был байрамды һәр саҡ көтөп алам.

Лиана Күсәрбаева

Мин Яңы йылдың матурлығын ошолай күрәм: өҫтәлдәге оливье салаты, икмәккә һыланған уылдырыҡ, телевизорҙа йыл һайын атайым яратып ҡараған «Яҙмыш һынауы» фильмы, тышта саңғы һәм санала шыуыу, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙың шыршы аҫтына һалған бүләктәре.

Ришат Каспранов

Новый год – это не только начало нового рубежа длиною в год, но и самый яркий праздник. Именно этому посвящены фильмы, сказки, стихотворения, рассказы, песни. Все они придают больше торжества, волшебства, сказочности. Это тот момент, когда можно забыть все обиды, невзгоды, оставив их в прошлом году, и начать все с чистого листа. Тепло, уют, непередаваемая атмосфера, новогодний стол, круг близких людей, салют после боя курантов, нарядная елка – вот, что значит для меня Новый год!

Вадим Кучаев

Һәр ғаиләнең үҙ йолаһы барҙыр, тип уйлайым. Беҙ, мәҫәлән, өҫтәл әҙерләгәс, күмәкләп Башҡортостан Республикаһы Башлығының ҡотлау телмәрен тыңлайбыҙ. Барыбыҙ ҙа байрамды яҡшы кәйеф менән ҡаршыларға тырышабыҙ, сөнки башҡорттоң ошондай әйтеме бар: «Яңы йылды нисек ҡаршылайһың, йылды ла шулай үткәрәһең».

Яңы йылда өмөт ҡапҡалары
Бәхет теләп кенә асылһын,
һәр бер йорттоң ишек-тәҙрәһенә
Аҡ ҡанаты менән ҡағылһын.
Аждаһа йылы менән, дуҫтар!

Ынйы Юламанова

Яңы йыл байрамында
Балалар шатланалар.
Ҡыш бабайға хат яҙып,
Тышта саңғы шыуалар.
Бала шатлығын күреп,
Әсәйҙәр ҡыуаналар.
Өйҙә тәмлекәстәр ашап,
Бергә шыршы биҙәйҙәр.
Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу
һәр бер өйгә инәләр.
Балаларға бүләк биреп
Арҡаларҙан һөйәләр.

Розалина Мусина

Яңы йыл – минең өсөн айырыуса мөһим байрам. Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә йәшәгән туғандарымдың йыйылыуын түҙемһеҙлек менән көтөп алам. Бигерәк тә алыҫ ерҙә оҙаҡ ваҡытҡа китеп эшләгән атайымды һағынам, уның ҡайтып төшөүе – үҙе бер бүләк. Ғаиләбеҙҙә һаҡланып килгән йола ла бар: ҡулға-ҡул тотоноп, түңәрәккә баҫабыҙ һәм ҡуранттар аҫтында теләктәр теләйбеҙ. Минеңсә, тик шундай мәлдәр күңелдәрҙә мәңгелеккә иҫтә ҡала.

Дилара Мостафина

10 е медицина йүнәлешендә уҡып йөрөгән Заһиҙә Хәмитова ял иткән ваҡыттарында илһамланып шиғыр яҙа. Гәзиттең был һанында Баймаҡ районынан быйыл ғына уҡырға килгән дәртле, сәмле ҡыҙҙың бер нисә шиғырын һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.

КӨҘ

Күпшы күлдәктәрен һалғандай,
Теҙелешеп баҫҡан ҡайындар.
Аҫтарында, гүйә, йомшаҡ юрған,
Түшәлгәндәр алтын балаҫтар.
Баш күтәрһәң, күктә, алыҫта
Өсмөйөшләп оса ҡыр ҡаҙҙар,
«Яҙҙар еткәс, ҡайтырбыҙ», – тип,
һаубуллашалар улар.

ТУЛҒАН АЙ

Тулған айға ҡарап оҙон төндә,
Ҡайҙаһыңдыр тиеп уйландым.
Бәлки, һин дә күккә ҡарап мине
Иҫләйһеңдер, тиеп ышандым.
Арабыҙҙа күп саҡрымдар, ләкин
Баш өҫтөндә бер үк йондоҙҙар.
Иҫләйһеңме, беҙ уларға ҡарап,
Үткәргәйнек бергә ваҡыттар.
Ул ваҡытта минең өсөн һинән
Яҡыныраҡ кеше юҡ ине.
Шул саҡтарҙа һинең өсөн минән
Ҡәҙерлерәк кеше юҡ ине.
Үтә ваҡыт аҡҡан һыҡмарҙай,
Үҙгәрәләр хатта йондоҙҙар.
Таң да атты, ә мин һаман
Ҡарап торам айға, ҡымшанмай.

ЙОНДОҘҘАР

Тау артынан балҡып ай ҡалҡҡанда,
Әкрен генә сыҡтым урамға.
Тирә-яғым тып-тын, ишетелә
Хатта йөрәгемдең тибеше.
Баш күтәреп күккә күҙ һалғайным,
Барлыҡ булған уйҙар юйылды.
Әйтерһең, киң йыһанда балҡыған
Йондоҙҙарға йомолдо.
Ҡарап торам, ә улар бит һаман
Саҡыралар кеүек үҙемде.
Күҙ ҡыҫҡандай йым-йым итеп,
Ҡыҙҙыралар минең күҙемде.
Эй йондоҙҙар, булһа мөмкинселек,
Менер инем шундуҡ күктәргә.
Ә әлегә өҫтән генә ҡарап,
Ҡала һеҙгә мине көтәргә.

ЕЛ

Халдан тая яҙып китеп барам,
Ә эргәлә моңло бер тауыш:
«Ҡурҡма, ярҙам итәм һиңә», – тип
Ҡолағыма әйтә сер, имеш...
Ошо мәлдә сайҡалдылар һыуҙар,
Бөгөлдөләр талдар, аҡты болоттар,
Ынғайлашып улар менән бергә
Шабайҙылар минең аяҡтар.
Арҡамдан мине һөйгәндәй,
Һыйпағандай иҫә наҙлы ел:
«Юл күрһәтәм, борма ҡасар яҡҡа,
Шул юлдарҙан булыр еңеллек».

Учредитель газеты: Башкирская республиканская гимназия-интернат № 1 им. Р. Гарипова г. Уфа, ул. Российская, 88. Тел.: 284-66-09

Редколлегия: И. Мухамедьянов, З. Хамитова, Г. Мухаметова

Редакторы: Клысова Г.С., Кайбышева А.Х.

Газета отпечатана в ООО «Издательство «Белая река» (450078, РБ, г. Уфа, ул. Кирова, 109) Тел.: 279-80-43. E-mail: wr@wriver.ru

Объем издания 1 печ. лист. Подписано в печать 26.12.23. Заказ 232018. Тираж 250 экз.